*Сәлим АЙВАЗОВ*

# КИТАП УЛ ҠОЯШ КЕ

Элек-электән зиһенде асҡан, аҡылды үҫтергән рухи байлыҡ сығанағы китап булыр. Ошо сығанаҡтан, белем шишмәһенән, һәр кем белем һыуын йотлоғоп эсеп, донъяны танып белә, хаҡ юлға күнә. Ул тылсымлы көс һымаҡ кешене рухландыра, ҡанатландыра, эштә ярҙам итә, ҡыйынлыҡтарҙан ҡотҡара, бөткөһөҙ мәғлүмәт, белешмә бирә, телде байыта. Хикмәт йәнә шунда: бер китап меңәрләгән кешене мәғлүмәтле итеү, өйрәтеү ҡөҙрәтенә эйә. Шуға ла боронғо заманда уҡ төрлө яҙмаларҙы, әҫәрҙәрҙе, баҫмаларҙы йыя, һаҡлай һәм уҡырға биреп торған урындар булдырылған.



Был фани донъяла иң яҡын рухташыбыҙ, дуҫыбыҙ, юлдашыбыҙ ҙа — китап. Кеше бала саҡтан ғүмер ахырынаса китаптан айырылмай, унан рухи көс, дәрт, илһам алып йәшәй. Бит уҡығандың белеме ҙур, белемлекенең көнө хозур. 1974 йылда Ҡыйғы районының Йосоп ауылында тыуған Лариса һылыу Ишмөхәмәтова ла уҡыу күңел нуры икәнен кескәйҙән үк төшөнөп үҫә. Лариса ихлас әйткәнсә, инәһе — балаларҙы, тәбиғәтте ныҡ яратҡан һәм китапһыҙ бер көн дә тора алмаған оло йөрәкле кеше, тәрбиәсе. Земфира Ҡыям ҡыҙы ғүмере буйы балалар баҡсаһында эшләй, кескәйҙәргә мөғжизәле белем донъяһына әйҙәй икән.

Инәһенән күреп Лариса ла китаптарҙы һыу кеүек эсә. Китапханала иһә Рәзилә еңгәһенең китапханасы эшен мөкиббән китеп башҡарыуын, китап менән йәшәреп йәшәүен күрә. Урта мәктәпте тамамлағас, Рәзилә Хажи ҡыҙы уға китапханасы һөнәрен һайларға тәҡдим итә. Еңгәһенең кәңәшен тотоп, Лариса Силәбе сәнғәт һәм мәҙәниәт институтының китапханасылар әҙерләү факультетына уҡырға инә.

Китапхана эше төрлө өлкәләр буйынса баҫмаларҙы йәмғиәттә файҙаланыуҙың маҡсаттарын, принциптарын, йөкмәткеһен, системаһын, формаларын өйрәнгән үҙе бер фән икән. Лариса институтта китапхана фәнен, тарихын, фондын, каталогын, китапхана эшмәкәрлеген ойоштороу, уҡыусылар менән эш үҙенсәлектәрен төплө өйрәнә.

Китапхана эше теорияһы һәм практикаһы мәсьәләләре буйынса

махсус юғары белемгә эйә ҡыҙ Өфөбөҙҙәге Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаға эшкә урынлаша. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә әле йәш белгестәргә иғтибар ҙа, ярҙам да, күңел йылыһы ла етмәй. Эш хаҡы ифрат аҙ, йәшәү шарттары ауыр булыу сәбәпле, Лариса тыуған төйәгенә, Ҡыйғы район китапханаһына эшкә ҡайта. Тормошҡа сыҡҡас, Мәсәғүттәге Дыуан районы үҙәк китапханаһына библиограф булып күсә.

Китапхана ике ҡатлы йортта урынлашҡан. Зөһрә Таһир ҡыҙы Хәбирова етәкләгән ун бер кешенән торған коллектив йылына биш мең кешене хеҙмәтләндерә, мәҙәниәт, мәғариф, ғилми ярҙам күрһәтеү өлкәһендә бөтмәҫ-төкәнмәҫ эш алып бара. Фәһемле осрашыуҙар, кисәләр, күргәҙмәләр ойошторола, китапхана гөрләп тора. Ғилми-ғәмәли эшмәкәрлектә библиограф Лариса Ревал ҡыҙы Ишмөхәмәтованың өлөшө лә тос. Матбуғатта донъя күргән яҙмаларҙы, әҫәрҙәрҙе асыҡлау, тема буйынса һайлап алыу, теркәү, системаға һалыу, исемлектәр, күрһәткестәр төҙөү, әҙәбиәткә күҙәтеү яһау ҙур тырышлыҡ, көс, күп ваҡыт талап итә.

Хәҙер белемһеҙ йәшәү мөмкин булмаған заманда уҡыуҙың бәҫе артҡандан-арта. Университеттарҙа, институттарҙа, техникумдарҙа ситтән тороп уҡыусылар ҙа байтаҡ. Уҡыу әсбаптары ҡиммәт булғас, улар китапханаларға килә, кәрәкле ҡулланмаларҙы һорай. Уҡыусылар менән бергә китапханасылар ҙа ҡыуаныс кисерә.

— Ҡояшһыҙ йәшәй алмаған һымаҡ, кеше лә белемһеҙ, китапһыҙ йәшәй алмай. Аң-белем таратыу бик изге һөнәр. Шуға ла китапханасы һөнәрен һайлауыма бер тамсы ла үкенмәйем. Хеҙмәт хаҡы аҙ, эш ауыр булһа ла шөғөләмдө яратам, — ти Лариса. — Кешеләрҙең белемгә ынтылышы, китап уҡып яңырыуы, йәшәреүе, рәхмәт һүҙҙәре дәрт-дарман өҫтәй. Китапханаға насар кешеләр йөрөмәй, изге ниәтләләр килә. Китап менән дуҫлашҡан, китап уҡып рухланған кешеләр бик бәхетлеләр ул.

Китапхана тормошонан, эшен яратып башҡарыуҙан, халыҡты рухи яҡтан хеҙмәтләндереүҙән йәм тапҡан Лариса һылыу үҙе лә бәхетле. 2000 йылда үткәрелгән һәм «Йыл китапханасыһы» тигән беренсе республика конкурсында Лариса Ревал ҡыҙы Ишмөхәмәтова Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы китапханасыһы тип билдәләнде һәм бүләктәргә лайыҡ булды.

Китапханалар — халҡыбыҙҙың аңбелем, мәҙәниәт үҙәге. Ватандаштарыбыҙҙы арымай-талмай белем, ғилем донъяһы менән таныштырған китапханасыларҙың хеҙмәтен тейешенсә баһалау, эш хаҡтарын арттырыу намыҫ, выждан эше. Ғөмүмән, уҡымышлылар, зыялылар хеҙмәтен, аҡыл эшен сит илдәрҙәге кеүек баһалау зарур. Шул саҡта белемгә ынтылыусылар артасаҡ, илебеҙ һәр йәһәттән һынылыш яһаясаҡ.

Кешеләр яңы быуатта, мең йыллыҡта белем, китап менән тағы ла нығыраҡ, тығыҙыраҡ мөнәсәбәттә йәшәйәсәк. Мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич яҙғанса:

*Ап-асыҡ тор һәр ваҡытта,*
*Эй китап, баҡһам һиңә.*
*Ысын, аҫыл нигеҙле ерҙән*
*Кұп белемдәр бир миңә!*

